*Әнисә МУЛЛАҒОЛОВА,*
*филология фәндәре кандидаты*

# Социаль-философик хикәйәләр

Әҙәбиәттең проза жанрында айырыуса социаль-философик характерҙағы әҫәрҙәр бик мөһим урын тота. Быңдай әҫәрҙәрҙә ғәҙәттә тарихтың һәм хәҙерге замандың үҙәк социаль проблемалары драматик үткенлек һәм философик тәрәнлектә сағылыусан.

Әле беҙ күҙәтеү үткәрергә теләгән хәҙерге башҡорт хикәйәләре ошо социаль-философик проблематиканы бәләкәй жанрҙа бер тамсыла ҡояш сағылғандай бер нөктәгәрәк туплауҙары яғынан фәһемле. Быңа ул хикәйәләр: «Йәләлетдин атай» (М. Кәрим), «Шағир», «Баҙ», «Әсә һәм бала» (Т. Ғиниәтуллин), «Сарсау» (Р. Байымов), «Хыялый ҡыҙ хикәйәте» (Н. Мусин), «Ҡылынмаған гонаһ», «Яҙа» (Р. Солтангәрәев), «Ҡараяр», «Триптих» (Ә. Әминев), «Ҡыҙыл балыҡ» (С. Шәрипов), «Умырзая гөлдөң ғүмеркәйе» (Т. Ғарипова), «Бүре» (А. Ҡәҙерғолов), «Остаз менән Нәркәс, йәки фанилыҡтағы хыял», «Һыңар алҡа» (Ф. Аҡбулатова), «Ҡара шәүлә» (М. Ишбулатов), «Бойороҡ» (Х. Тапаҡов), «Партбилет» (Г. Ғиззәтуллина) һ.б.

Әлбиттә, социаль характерҙағы хәл-ситуациялар әҫәрҙә герой характеры һәм уның хәрәкәте аша асыла. Бер үк ситуацияла төрлө әҫәр геройы төрлөсә хәрәкәт итә. Шуға күрә бер үк теманан әллә күпме идея, әллә күпме дөйөмләштерелгән фекер тыуыуы ихтимал. Һуғыш темаһын ғына алайыҡ. Уға бигерәк тә яу ауыһыҙлығын үҙе күргән өлкән быуын әҙиптәре һәм бала сағы шул осорға тура килгән урта быуын яҙыусылары мөрәжәғәт итә. Был ҙур ижтимағи-трагик проблеманан да оҫта әҙиптәр философик дөйөмләштереүҙәргә эйә булған фекерҙәргә килә.

Һуғыш темаһы тигәндә яу яланында булған хәлдәрҙе тасуирлаусы әҫәрҙәрҙе генә күҙ алдына килтерергә ярамай. Уны киңерәк планда, һуғыш касафатына ҡағылышлы бөтә хәл-ситуацияларҙы, хис-тойғоларҙы сағылдырған әҫәрҙәргә ҡарата ҡулланырға мөмкин.

Р. Байымовтың «Сарсау» хикәйәһе тап шул юҫыҡта яҙылған. Әҫәрҙә ҡатмарлы сюжет та, киҫкен конфликт та юҡ. Лирик герой йәйҙең иң эҫе мәлендә, тирә-йүндә ҡоролоҡ хөкөм һөргән осорҙа тыуған ауылына ҡайта. Рәссам ҡулы менән автор тәбиғәттең хәтәр мәлен йәнле итеп күҙ алдына баҫтыра: «Тирә-йүндәге бөтә нәмә эҫелектән ыҙа сигә. Ҡоролоҡтоң ҡоро тыны йәп-йәш көйө ҡара яна башлаған үләндәрҙең, гүйә, аҡтыҡ йәшәү көсөн һурып алырға маташа... Шул саҡта күңелгә терт итеп хәүефле бер уй төшә: ҡорғаҡһыған был ер йәнә күкрәп йәшәп китә алырмы? Шифалы елдәр һуңға ҡалып, ер вайымһыҙ бер ташҡа әйләнмәҫме?»

Ошондай һүрәтләмәгә авторҙың борсоулы уй-фекере лә ҡушыла. Эске монолог бында тамаша тыуҙырыу өсөн генә хеҙмәт итмәй. Автор аллегорик рәүештә мөһим

фәлсәфәүи һорау ҡуя: һынған рухты төҙәтеп, туңған күңелде иретеп буламы? Быны өсөн ни эшләргә? Был һорауға яуап төп герой хәрәкәте аша асыҡлана. Хәлимә апай лирик геройҙың туған-тыумасаһы булмаһа ла, бала саҡтан уҡ аралашҡан күптәнге яҡыны. Өйләнешкәндән һуң ике көн генә йәшәп ҡала һөйгәне менән Хәлимә. Ҡәҙерлеһе һуғышта һәләк булғас, мәңгелек юғалтыу ҡайғыһы эсендә йәшәй ул. Япа-яңғыҙ ҡалған ҡатындың өмөтһөҙ көтөү һәм ауыр хеҙмәт менән үткән аянысл ы ғүмере һаулығын ғына түгел, рухын да ҡаҡшатҡан. Уның тышҡы ҡиәфәтен, йәғни художестволы портретын, автор тәбиғәт күренеше аша ҡыҫҡа, әммә йәнле итеп бирә алған: «Мин йәнә аяғын әленән-әле һыу менән «терелтеп» ултырған Хәлимә апайыма ҡарайым. Уның йыйырсыҡтар ярған йөҙөн, кипкән аяҡтарын ҡоролоҡтан яфа сиккән, йәшәү дәрте һүлпәнәйә төшкән ошо ер тәненә оҡшатам».

Эйе, Хәлимә апайҙың да ауырлыҡтарҙан, насар сирҙән, бигерәк тә иғтибарға, наҙға сарсауҙан йәшәү дәрте һүлпәнәйә төшкән. Әммә әҫәр аҙағындағы бер деталь — ямғырҙан һуң түмәр аҫтынан ҡалҡып сыҡҡан сәскә, уға булған ҡарашты бөтөнләй үҙгәртеп ебәрә. Юҡ, һүнеп бөтмәгән әле йәшәү дәрте Хәлимә апайҙа. Уның сәскәгә ҡарап һоҡланыуы, йөҙөнә нур алыуы өмөт уята: ҡоролоҡта килгән шифалы ямғыр һымаҡ, килер әле уға ла шифалы бәхет. Һыҙланыуы ла баҫылыр, сарсауы ла бөтөр...

Ҡыҫҡа ғына сюжетлы был әҫәрҙә автор тәрән уйҙарға һалырлыҡ идея күтәрә: өмөтөңдө юғалтма, кешем! Кешене кеше иткән, йәшәүҙе йәшәү иткән — өмөт һәм рух. Ошо фәлсәфәүи идеяһы менән көслө был хикәйә.

Бына Мостай Кәримдең «Йәләлетдин атай» хикәйәһе. Бында ла ҡатмарлы сюжет, киҫкен конфликт юҡ. Әҫәр ағышы талғын ғына бара: балалар йортона аяҡһыҙ матрос тәрбиәсе булып килә һәм быға са йәшәп килгән ҡанундарҙы йырып, балалар күңелен яулай ҙа тиҙ арала китеп тә бара. «Улдарым, донъя беҙ уйлағанса ғына бармай, миңә иртәгә үк ауылға китергә кәрәк», — ти ул. Китеүенең сәбәбен дә аңлатып тормай. Ә был иһә уҡыусыны уйландырырға, төрлө фараз ҡылырға мәжбүр итә. Һуңынан асыҡланыуынса, ул ана шул үҙенең башбаштаҡлығы (детдом ҡанундарын боҙоуы) арҡаһында эштән ҡыуыла булып сыға. Күпмелер юғалып торғас үҙенең элекке тәрбиәләнеүсеһе Ҡуянов менән ҡайтанан осраша. Михаил инде ҙур түрә, ә Йәләлетдин атай (балалар йортонда ҡушылған исем) ябай вахтер булып ултыра. Шулай ҙа ике уҙаман элеккесә берберенә ылыға, күңелдәре бер-береһенә тартыла. Һуңғы юлға ла Йәләлетдин ҡарт үҙенең әүәлге уҡыусыһы Ҡуяновтың приемныйынан китә. Оҫта художник ошо кескәй генә сюжеттан да ҙур һәм тәрән мәғәнәле һығымталар сығара.

Балалар йортондағы хәлдәрҙе генә алайыҡ. Унда көс, усаллыҡ ҡануны хөкөм һөрә. Уҡытыусылар ҙа бында бойороҡ менән генә алдыра. Шуға күрә Йәләлетдин Ҡулыевтың тәрбиәсе булып килеп, балалар менән аталарса аралаша башлауы барыһын да аптырауға ҡалдыра. Етемдәрҙе өйөнә саҡырып ҡунаҡ итеүе лә башҡа һыймаҫлыҡ хәл кеүек ҡабул ителә. Былар барыһы ла уның эштән китеүенә сәбәп була. Әммә ошо ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә лә етем балалар күңелендә тәрән эҙ ҡалдыра. Кешелеклелеге, хәстәрлелеге менән дә балалар араһындағы ҡырағай мөнәсәбәттәрҙе яҡшы яҡҡа үҙгәртә. Бындағы фәһемле фекер: яҡшылыҡ — рәхимһеҙлекте еңер көс, рухи көс ул.

Әҫәр нигеҙендә ижтимағи мөхит, социаль тормош ята: һуғыштан һуңғы йылдар, балалар йорто йәшәйеше, яраланған ябай һалдат яҙмышы. Улар йәшәү, кеше ғүмере, уның булмышы хаҡында уйланыуҙарға илтә. Ошо хикәйәгә вайымһыҙлыҡ һәм хәстәрлелек, изгелек менән яуызлыҡ, ҡаты бәғерлелек менән мәрхәмәтлелек, бөйөклөк һәм түбәнлек кеүек ҡапма-ҡаршы көстәр көрәше һыйған. Йәләлетдин матрос кешелеклелек һәм юғарылыҡ өлгөһө булһа, уны эштән ҡыуыусы директор (әҫәрҙә уның исеме лә аталмай) дорфалыҡ, түбәнлек миҫалы. Улар араһындағы рухи дистанцияны автор ҡыҫҡа, әммә үтә тапҡыр ремарка менән былай тип әйтеп биргән: «Мин урынымдан торҙом, ә ул түбәндә тороп ҡалды». Был һүҙҙәргә тәрән кинәйә лә һалынған. Автор үҙе: «Мәрхәмәтле, изгелекле бул, кешем! Ғүмерҙең бөйөклөгө – изгелектә», тигәндәй.

Социаль-философик типтағы хикәйәләр галереяһынан Таңсулпан Ғарипованың «Умырзая гөлдөң ғүмеркәйе» тигән әҫәрен айырым әйтке килә. Уның тетрәндергес эстәлеге лә, художестволы стиле лә уҡыусы күңеленә үтеп инерлек. Автор һүрәтләгән ҡәҙимге тормош материалдарында, уны хасил иткән күренеш-ситуацияларҙа ниндәй көсөргәнешле социаль проблемалар, философик фекерҙәр ятыуын тояһың.

Әҫәр төп героиня — алам-һалам йыйыусы Сөмбөл тигән ҡатындың Сәмиғуллин тигән ир менән осрашыуынан башланып китә. Уҡыусы аңлай — улар элекке таныштар. Әммә автор бында улар араһындағы ҡасандыр булған мөнәсәбәттәрҙе тәфсирләп һөйләп тормай. Һәм был кәрәкмәй ҙә. Ир менән ҡатындың кинәйәле һәм серле һөйләшеүенән, һаран ғына ҡылыҡ-кисерештәренән уҡыусы әлегә аңлатма бирелмәгән, әммә һорау тыуҙырған күренешкә үҙенсә яуап эҙләй, алда ни булырын, ваҡиғаның ни менән барып бөтөрөн күҙалларға тырыша. Йәғни ул үҙе лә автор роленә инеп китә. Бындай башланыш композицион яҡтан үҙен аҡлай — ул сюжет динамикаһын тыуҙырыуға ла, геройҙарҙың характер һыҙаттарын асыуға ла булышлыҡ итә.

Төп геройҙы алам-һалам йыйыусы итеп һүрәтләүҙә лә мәғәнә ятмай булмаҫтыр. Сепрәк-сапраҡ, һөйәк, көл, тимер йыйыу факты социаль тормошобоҙҙоң ғәҙәткә ингән көнкүреш детале түгел инеме? Ә ул иһә — бер партия хакимлығына һәм хакимдар башбаштаҡлығына нигеҙләнгән илдең хәйерселеген күрһәтеүсе мөһим фактор. Ябай ғына көнкүреш әйберҙәренең: тараҡ, бәке, йөн буяуҙары, һабын, балалар уйынсыҡтарының да булмауы шул турала һөйләмәйме? Элеккене һағынып һарғайыусыларға ла, уны күрмәгән йәштәргә лә фәһемле был сюжет һәм ундағы төп образ.

Әҫәр башындағы көтөлмәгән осрашыу Сөмбөлдөң эш буйынса китеп барған юлын ғына түгел, уй-кисерештәрен дә, ҡылыҡтарын да бөтөнләй икенсе йүнәлешкә бора. Сәмиғуллиндың тәҡдимен тотоп, ул хакимлыҡ иткән ауылға барыуы, шул ир алдында үҙ-үҙен тотошо аша уҡыусы Сөмбөлдөң ғашиҡ күңеленә төшөнә, ҡыланыш-хәрәкәттәрен дә аңлай башлай. Әйе, уҡыусы быларға үҙе төшөнә. Сөнки автор хикәйәләүҙе күп һүҙле тура тасуирлауға ҡормай, ә йыйнаҡ, образлы стиль менән эш итә, бәләкәй генә художестволы деталь менән дә ул күпте аңғарта. Мәҫәлән, Сөмбөлдөң Сәмиғуллинға булған хис-тойғоһо бер күренештәге ике-өс һөйләм менән дә асыла. «Сөмбөлдөң ғәҙәттәге аралашыу ысулы — шаталаҡ хәбәрсәнлеге шундуҡ юҡҡа сыҡты.

— Эш ни, бара... — Эске бер ҡалтыраныу менән яуап биргәнен, бәлки, был юлы ла Сөмбөл үҙе генә тойғандыр». «Сәмиғуллин өсөн Сөмбөл кемдер, нимәлер — уныһы ҡараңғы, мәгәр Сөмбөл өсөн Сәмиғуллин — ҡаршыһында үҙе баҙап ҡала торған берҙән-бер ир ул».

Ир менән ҡатындың осрашыуына бәйле артабанғы ваҡиғалар: Сөмбөлдөң Күстән ауылындағы алыш-биреше, шул арала Сәмиғуллин менән интим мөнәсәбәткә инеүе, тегеһенең ғаилә хәле, ҡатындың ҡасандыр йәшлек хатаһы шаһиты Шәрифә ҡарсыҡҡа тап булыуы, шунлыҡтан уянған йәшертен хәтирәләре, ҡайтышлай күргән юл ғазаптары, һыҙланыу-уйланыуҙары иҫтә ҡалырлыҡ йәнле күренештәр булып күҙ алдына баҫа: «Һыу төбөнән бер ус таш алып, Сөмбөл уларҙы тәү күргәндәй ентекләп ҡарай башланы. Ниндәй генә төҫтәр юҡ бында! Ҡыҙыл, һары, йәшел, күк, ҡара, аҡ... Хет муйыныңа мунсаҡ итеп теҙеп таҡ! Әммә улар һыуҙан сыҡҡас, елгә кибә, тоноғая, теремек матурлыҡтарын юя башланы.

— Их! — Сөмбөл көрһөндө. Бына уға ла күңелендә һөйөүгә оҡшаш тойғо йөрөткәндә рәхәт ине, йәшәү күңелле ине. Әммә күңелен асыуы булды — хистәре һүрелде, күңеле ташландыҡ ҡош ояһына оҡшап ҡалды».

Оҫта ҡулланылған художестволы деталдәр, образдар хәрәкәте, характерҙар һәм хәл-ситуациялар бәрелеше әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен, социаль-философик эстәлеген асырға булышлыҡ итә. Бына бер кескәй генә деталь: ауыл советы кәнсәһендә юлбашсы портреты эленгән, уның аҫтына ошондай плакат һүҙҙәре яҙылған: «Беҙҙең намыҫ партия намыҫы менән үлсәнә». Быға ҡайһы бер уҡыусының иғтибар ҙа итмәүе мөмкин. Ә ғәмәлдә иһә ул бит юҡҡа килтерелмәгән һәм ауыл хакимы Сәмиғуллин бүлмәһенә юҡҡа ҡуйылмаған. Был коммунистың (ә һүрәтләнгән заманда һәр түрә мотлаҡ коммунист ине) намыҫы, дөрөҫөрәге, намыҫһыҙлығы, түбәнлеге (ҡатыны Гәүһәргә хыянаты, уны хеҙмәтсе сифатында тотоуы, Сөмбөлгә иһә биологик хәжәт-теләген, тән танһығын ҡандырыу объекты итеп кенә ҡарауы) партия намыҫын ҡылыҡһырлай икән, ниндәй фирҡә ул? Тәрбиә биреүсеме, әллә Сәмиғуллин һымаҡ тәрбиәһеҙҙәр үрсетеүсеме? Уның әхлаҡһыҙлығы, партия юлбашсыһының портреты һәм әҙәпкә өндәүсе лозунг аҫтында, кешеләргә тәрбиә биреүсе ойошма кәнсәһендә ҡатынына хыянат итеүе түбәнлек күрһәткесе түгелме ни? Ошо яғы менән Сәмиғуллин ҡайһылыр моментта хаким коммунист образын да кәүҙәләндерә. Шуға күрә был эпизодты тормош-көнкүреш ваҡиғаһы итеп баһалау дөрөҫ булмаҫ ине, уның төбөндә ул заман өсөн социаль күренешкә әйләнә башлаған тормош материалы ята.

Хикәйәнең кульминацияһы Сөмбөлдөң Шәрифә ҡарсыҡ менән тәүләп осрашып-танышыуын һәм икәүләп ҡылған оло гонаһтарын тасуирлаған эпизодта. Күп йылдар элек, Сөмбөлдөң үҫмерлектән үтеп барған мәлендә булған ул хәл. Уйламаҫтан-белмәҫтән ауырға ҡалған Сөмбөл юл айҡанлы ошо Күстән ауылында йәшәүсе Шәрифә исемле ҡатында көтмәгәндә етлекмәгән бала таба. Кескәй генә яралғыны, закон хөкөмөнән ҡурҡҡан Шәрифә, яңы тыуған бесәй балалары менән бергә биҙрәләге һыуға батырып, сүплеккә түгә. Ошо икәү генә белгән сер, икәү ҡылған гонаһ уларҙы мәңгелек бер епкә бәйләй. Ул ваҡиғаны ғүмер буйы оноторға тырышҡан Сөмбөл өсөн инде ер йөҙөндә юҡтыр тип уйлаған Шәрифә ҡарсыҡ менән ҡайтанан осрашыуы, шул сәбәптән яңырған ғазаптар утында яныуы әҫәр драматизмын йәнә лә тәрәнәйтеп ебәрә. Уларҙың ҡыҫҡа ғына моментта тыуған диалогы ла характерҙар асыу өсөн генә түгел, ә мәғәнәүи фекерҙәр әйтеү өсөн дә файҙаланыла. Мәҫәлән, ҡарсыҡтың: «Ҡайҙа барһаң да ҡара һаҡалың үҙеңдән ҡалмай инде», — тигән ҡыҫҡа ғына репликаһында ла кинәйә ята: булмышыңдан, үҙ асылыңдан ҡасып булмай. Ана бит, байтаҡ ғүмер кисереп тә, күпме ыҙа-михнәттәр күреп тә Сөмбөл һаман олпат аҡылға килмәгән — йәш сағындағы кеүек әле лә уйламаҫтан ҡыйыш аҙым яһап (Сәмиғуллин менән интим мөнәсәбәткә инә), өҫтәмә рухи ғазапҡа дусар була: ысын мөхәббәт барлығына ышанысын юғалта. Уның күңел кисерештәрен дә, был юлы ни ҡыланғанын да, оҙон ғүмер кисергән тәжрибәле психолог булараҡ, Шәрифә ҡарсыҡ аңлап-белеп тора. Быны ла автор ҡыҫҡа һәм йыйнаҡ диалог аша уҡыусыға еткерә: «— Сәмиғуллиндарға төшкәнһең икән... — Ҡарсыҡ Сөмбөлгә тағы яҡыныраҡ килде. — Ә Шәрифә ҡарсыҡтың кәрәге бөттөмө инде хәҙер?

— Нишләп... — Сөмбөл Шәрифә ҡарсыҡтың һаҫыҡ тынынан артҡараҡ сигенде, — Сәмиғуллин таныш бит, район үҙәгенә отчет би... — Әммә ҡарсыҡ уға һүҙен әйтеп бөтөргә бирмәне:

— Үҙе таныш, хи-хи... Ҡатыны — байғош!»

Сөмбөлдөң ҡайтыу юлында күргән михнәттәре һүрәтләнгән картина ла көсөргәнешле драматик характерҙа. Бында төп образдың яңы характер һыҙаттары асыла. Ул — ауылдан-ауылға һамаҡлай-шаярта сепрәк-сапраҡ йыйып йөрөүсе шалаҡ сауҙагәр, һөйөү хисендә баҙлаусы наҙлы ҡатын, уйламай ҡылынған гонаһтары өсөн ут йотҡан хисле кеше генә түгел, ҡырыҫ тормош ауырлыҡтарын да еңә алырға һәләтле көслө шәхес тә, хәстәрлекле әсә лә. Ана бит, өйҙә ҡалған улын хәстәрләп, талсыҡҡан атына ярҙамлашып тауға ҡарай йөктө тарта. Арып ауған атына ял биргән мәлдә күргән төшө лә уның кешелеклегенә, әсәйлек булмышының асылына ишара. Төш картинаһындағы бер эпизод тетрәндерә һәм уйландыра. Имеш, Шәрифә ҡарсыҡ Сөмбөлдөң алыҫта ҡалған ҡыҙын килтергән: «Бир!» — Сөмбөл сабыйҙы ҡарсыҡ ҡулынан тартып тигәндәй алды. Алды ла аптырап ҡалды: баланың күҙҙәре хәс тә умырзая, юҡ, ысын умырзая!

— Балам! Сабыйғынам!..

Сөмбөл ҡыҙын имеҙә лә башланы, ул арала икенсе түше лә эйеп китте, унан туҡтауһыҙ һөт аға... Ана ул, йыйылып күләүек яһаны. Шәрифә ҡарсыҡ услап-услап эсәсе шуны?!

— Нишләйһең ул, инәй?!

— Ағарынам, таҙарынам...

— Нимәнән?

— Нисек нимәнән... Баланың һөйәктәрен тейәп киттем дә ҡотолдом, тигәйнеңме? Эс, һин дә эс, таҙарын! Баланы бит... икәү үлтерҙек!»

Был эпизод әҫәрҙең фәлсәфәүи-эстетик асылын аңлауға булышлыҡ итә. Ҡарсыҡтың: «Таҙарынам, һин дә таҙарын!» — тигән һүҙҙәре лә кинәйәле мәғәнәгә эйә. Әҫәргә исем булып килгән һүҙҙәрҙең дә мәғәнәһе асыла төшә ошо эпизодта: умырзая гөлдөң ғүмеркәйе — донъяға тыуып та йәшәү бәхетен күрә алмаған сабый ғүмеренең образлы сағылышы ул. Умырзая гөлө, икенсе яҡтан, йәшәү, яңырыу символы ла бит әле. Шуға күрә, әҫәр аҙағында авторҙың йәнә ошо гөл образына мөрәжәғәт итеүендә лә шундайыраҡ ғиллә ята булыр: сәскә матурлығын күрә белгән Сөмбөлдә әле йәшәү дәрте һүнмәгән, уның да яңырыр, таҙарыныр мәле килер әле.

Хикәйә ошондай күренеш менән тамамлана: «Сөмбөл, йөгөн йә арттан этеп, йә ҡабырғанан имәүҙәп, итеген аяғынан һурып алырҙай булып йәбешкән батҡаҡты кисеп, алға бара. Ситтән ҡарағанда, йөк уны һөйрәйме, әллә ул йөктөмө — әйтеп булмай...»

Ҡайһыһы еңер — тулы йөк гонаһ-ғазаптарымы, Сөмбөл уларҙымы? — әлегә әйтеүе ҡыйын.

Г. Ғиззәтуллинаның «Партбилет» хикәйәһе күпмелер дәрәжәлә «Умырзая гөлдөң ғүмеркәйе» хикәйәһе менән оҡшаш: ике әҫәрҙең дә идея-эстетик нигеҙен йәшәү

һәм үлем, гонаһ һәм яза, йәмғиәт һәм шәхес, ижтимағи тормош һәм шәхсиәт кеүек мөһим социаль-философик проблемалар тәшкил итә. Әлбиттә, һәр яҙыусы уларҙы үҙ фантазияһы, үҙ стиле менән үҙенсә яҡтырта. Йәнә ике хикәйәнең дә төп геройҙары байтаҡ ғүмер кисергән, ауыр михнәттәргә, һынауҙарға дусар булған ҡатындар. Сөмбөл тормош ғазаптарын йәшлектә абайламай ҡылған гонаһы һәм һуҡыр мөхәббәте арҡаһында татыһа, «Партбилет» хикәйәһендәге исемһеҙ ҡатын (хикәйәләү беренсе заттан алып барыла) иһә үлемесле сире арҡаһында һөйгән иренә терәк була алмауы өсөн хафалана. Йәшәү мәғәнәһенә, кеше асылына, тормош ысынбарлығына ул үлемесле түшәккә ятҡас ҡына төшөнә. Кешеләрҙең тик изгеләрҙән генә тормауын, тормоштоң тик яҡшыға ғына ҡоролмауын, һөйөү менән нәфрәттең үтә яҡын ғына йөрөүен тап ошо мәлдә аңлай ул. Ана бит, ун биш йыл бергә йәшәп, яратам тип гел ышандырып килгән ире лә ниндәй түбән әҙәм булып сыға: ул ҡатыны алдында уның әхирәте менән хыянат ҡылып ҡына ҡалмай, ә үлем түшәгендә ятҡан ҡатынынан юғалған партбилетын таптырып, ниндәй әшәке һүҙҙәр яуҙыра, ҡәбәхәтлектә ғәйепләй. Әммә Талханың үҙе ҡылған ҡәбәхәтлектәре, әшәкелектәре уны бәхетһеҙ, бахыр әҙәм хәленә төшөрә. Әҫәр аҙағындағы эпизодта уның ошо хәле бик оҫта бәйән ителә. Ҡатындың аҡтыҡ көсөн йыйып, яҡшы кешеләр ярҙамында райкомға барыуы, унда партиянан сығарылырға тейеш ирен яҡлап һөйләгән булыуы — асылда Талхаға сығарылған аяуһыҙ күңел хөкөмө ул. Быны ултырышта ҡатнашҡандар ҙа яҡшы аңлай, сөнки улар түрәлеккә үрелгән әҙәм аҡтығының ни рәүешле партбилеттан ҡолаҡ ҡаҡҡанын яҡшы белә. Ваҡиғалар һәм характерҙар бәрелеше ғәйрәте ташып торған әзмәүерҙәй Талханың түгел, ә көндәре һанаулы ҡалған сибек ҡатындың еңеүе менән тамамланыуында ла тәрән мәғәнә ята: хыянат, вәхшилек, яуызлыҡ донъялыҡта үҙ язаһын алырға тейеш.

Эйе, бахыр хәленә ҡалдыра ҡатын ирен, унан үсен ала. Әммә Талхаға булған һөйөүе уны ошо үҙе ҡылғандары өсөн үкенергә мәжбүр итә. Ул иренең бахыр хәлгә тарыуына ла үҙен ғәйепле һанай: «Аҡтыҡ көсөмдө йыйып, күтәрмәгә сығып баҫҡан Талхаға ҡарайым. Ҡарайым да үҙәгем өҙөлә: ул шул тиклем бәхетһеҙ, бахыр. Әгәр ҙә ауырып, үлергә йыйынып ҡайғыға ҡалмаһам, ул һаман да ғорур, көслө, киң күңелле Талха булып, күкрәген киреп, кинәнеп йәшәп ятыр ине».

Был һүҙҙәрҙә ике кинәйәле мәғәнә ята. Беренсеһе — мөхәббәт нәфрәттән көслөрәк, тигәнде аңлатһа, икенсеһе иһә — бәхет өсөн йән сәләмәтлеге генә түгел, тән сәләмәтлеге лә мөһим.

Шулай итеп, «Партбилет» хикәйәһе лә үрҙә ҡарап үтелгән әҫәрҙәр кеүек, мөһим социаль-философик проблемалар күтәрә һәм үҙенсәлекле йөкмәткеһе, художестволы эшләнеше менән жанр формаһы үҫешенә өлөш индерә.

Ғөмүмән алғанда, социаль-философик характерҙағы хикәйәләрҙең ишәйә һәм төрлө яҡлап байый барыуы яҙыусыларыбыҙҙың активлығын, новеллистикабыҙ офоҡтарының киңәйә төшөүен билдәләүсе күрһәткес ул.